Сәғит Агиш
Ғәләмшә бурылы

Мал эйәһенә оҡшай, тиҙәр. Дөрөҫ түгел икән. Бына Ғәләмшә әбейҙең бурылын уның үҙенә сағыштырып ҡара! Улар араһында бер төрлө лә уртаҡлыҡ юҡ. Ғәләмшә әбей бер төрлө, бурыл икенсе төрлө. Ғәләмшә әбей бурылдың эйәһе.
Бурыл уҫал.
Ғәләмшә әбей йыуаш.
Бурыл ялҡау.
Ғәләмшә әбей егәрле.
Бурыл һимеҙ.
Ғәләмшә әбей ябыҡ.

Бурылдың уҫал булыуы Ғәләмшә әбейҙең йыуаш булыуынан килә. Сөнки ул Ғәләмшә әбейҙән ҡурҡмай, үҙе теләгәнен эшләп тик йөрөй. Ғәләмшә әбей уны туҡмамай. Ниңә туҡмаһын, ул — уның берҙән-бер аты. Үҙ ғүмерендә күргән бер ат ул.
Ире һары менән өс йыл ауырыны. Унан, ҡара һарыға әйләнеп, ярты йыл йөрөнө лә үлеп китте. Ул үлеп киткәндә, бурыл тай ғына ине. Тай булғанға күрә, Ғәләмшә әбей уны иркәләп үҫтерҙе. Бына ат булыр ҙа улыма ярҙамсы булыр, беҙгә мал табышыр, тип уйланы. Улы уның өсөн ҡырҙан үләндәр алып ҡайта, баҫыуҙан һоло башаҡтары йыя, ҡайһы саҡта йомшаҡ үләндәрҙе көрпә менән бутап бирә торғайны. Бурыл ярлы ғаиләгә килеп инһә лә — иркә үҫте. Бик йәштән кешеләр тирәһендә әйләнгәнгә, уларҙан ҡурҡмай. Алғы яҡтан килһәләр, тешләй, артҡы яҡтан килһәләр, тибә, эргәһенән килһәләр, йә әйләнеп тибә, йә әйләнеп тешләй.
Бәләкәй хужалыҡтың эше лә бәләкәй була. Уның ҡыр тулы ашлығы, аҙбар тулы тиҙәге, бура тулы бойҙайы булмағас, бурылға ла артыҡ эш юҡ. Ғәләмшә әбейҙәр ҡыйығынан бер генә мөрйә сыға. Улар бер генә мейес яғалар. Ә бер генә мейес яҡҡас, утын да аҙ кәрәк булыуы билдәле. Бөтә ташыу бурыл өҫтөнә төшә торған булһа, ул да ҙур түгел. Шуның өҫтөнә тырыш Ғәләмшә йәй буйына тиҙәктәр йыйнап килтерә. Уларҙан утын яһай. Ғәләмшә әбей олоғайып бара. Шуның өҫтөнә уның һаулығы ла ҡәнәғәтләнерлек түгел. Арҡалары йылы өйҙә лә өшөп тора. Улы йәш әле, ул да артыҡ ҙур эштәргә ярамай. Шулай булһа ла, бурылды егеп әллә ҡайҙа алыҫ ерҙәргә китмәйҙәр. Күп тигәндә тирмәнгә баралар.
Бына ошо шарттар бурылды ялҡау, сығынсы, тиҫкәре һәм уҫал итеп етештерҙе. Яһалғандан бирле дегет төҫө күрмәгән тәгәрмәс аҡрын ғына, бүлеп-бүлеп кенә шығырҙап килә лә ҡапыл әсе итеп һыҙғырып ебәрә. «Атлайыммы икән, юҡмы икән?» тип һәлпәңләп барған бурылға был етә ҡала. Ул аҡрын ғына, хәле бөткән туп кеүек кенә, барып туҡтай. Ҡапыл ғына туҡтарға ул ялҡаулана. Унан һуҙып ҡына артҡа ҡарай. Ҡабыҡтарҙан ғына әтмәләп яһалған иҫке арбала Ғәләмшә менән улы Әхмәтдин ултыра. Улар ҙа бурыл холҡона өйрәнгәндәр. Бурылдың туҡтап алыуы улар өсөн көтөлмәгән бер ваҡиға түгел. Уға ҡапыл асыуланып ҡысҡырырға ла, шунда уҡ шапылдатып һуғырға ла ярамай. Улай итһәң, ҡойроғон ике яҡҡа ғына бутаясаҡ та, әгәр ҙә ялҡауланмаһа, күсәргә шарт иттереп бер тибеп ҡуясаҡ. Унан тик тора. Бар һин уның менән талаш, бар һин уның менән судлаш! Ғәләмшә ҡортҡа уның холҡон белгәнгә күрә:
— На, на, бурыл! Нимә холоҡһоҙланаһың, на, бурыл!— тип ялына башлай. Бурыл аҡрын ғына алғы аяҡтарын ерҙән өс кенә ҡарыш күтәреп атлай башлай һәм ялҡауы килгәнсе бара бирә.
Улар урманға етәләр. Бурыл кешеләргә бик асыуланһа ла, урман күгәүендәренә артыҡ иҫе китмәй — тик, ҡолаҡ һелкеп, унда-һанда ғына ҡойроҡ һуғып тороу ҡенән генә сикләнә. Ауыҙлыҡты ул үҙ ғүмерендә күргәне юҡ. Арҡалыҡ һәр ваҡыт төшөнкө була. Шуға күрә ул оҙонораҡ үләндәрҙең баштарынан эләктерә лә сәйнәй бирә.

Бурылдың тормошо тын. Бурылдың тормошо, Ғәләмшә ҡортҡа тормошо кеүек, борсоулы, йән әрнеткес түгел.

Ғәләмшә ҡортҡаны уның тарамыштарын һыҙлатҡан яңғыҙаҡ тормош ауырлығынан тик колхоз ғына һөйрәп сығара алды. Шуға күрә колхоздың кәрәклеге тураһында, башҡа ҡортҡалар кеүек, һуңға ҡалып аңламаны. Докладсы һөйләү менән үк:
— Беҙҙең өсөн уйлап сығарылған нәмә икән,— тип уйланы.
Башта улы Әхмәтдин аҙ ғына борсолдо:
— Әгәр ҙә бурыл колхоз кешеләрен тибеп үлтерһә, беҙгә ауырлыҡ булмаҫмы икән? Колхозға ингәс: «Атығыҙ уҫал, сығынлай... йөрөмәй», — тип кире сығарып ебәрмәҫтәрме икән? — тип бик күп һорауҙар бирҙе. Ғәләмшә әбей колхоздың һәйбәт икәнен төшөнһә лә, уның тышҡы һәм эске төҙөлөштәрен бик аҙ белә йәки бер ҙә белмәй. Шуға күрә лә Әхмәтдингә был турала закон теле менән яуап бирә алманы.
— Ни эшләп улай итһендәр? — тиеү менән сикләнде.
Ә башына Әхмәтдин уйҙарына яҡыныраҡ бер уй килмәй ҡалманы. Ысынлап та, бурылдың бик әшәке ғәҙәттәре бар. Уның берәй бәлә сығарып ҡуйыуы бер ҙә иҫ китерлек эш түгел.
Ғәләмшә әбейгә лә, Әхмәтдингә лә колхоз килеште. Улар башта уҡ бөлгөнлөктән, яланғаслыҡтан тик шул юл менән генә сығырға мөмкин икәнен төшөнә башланылар. Дөрөҫ, етмәгән ерҙәр бик күп. Ләкин бара-бара төҙәлер. Ялҡаулыҡҡа өйрәнгән бурылға колхоз әллә ниндәй ҡыйынлыҡтар килтермәне. Уларҙы ҡарарға ҡуйылған конюх ялҡаулыҡҡа бурылдан да уҙҙыра. Шуның өҫтөнә ул сиктән тыш ҡурҡаҡ. Малдар араһында йөрөгәндә берәй еремә теймәгәйҙәре, тешләмәгәйҙәре, аяғыма баҫмағайҙары, сапсымағайҙары тип кенә уйлап йөрөй. Бурылдың ҡолаҡтарын артҡа яткырып ҡапыл ынтылыуҙары уның ҡотон алды. Ул күп ваҡытта эстән генә:
— Әҙәл ошо бурылдан ғына булыр, ахыры,— тиш йөрөй башланы. Бурыл тураһында һис бер ҡолаҡҡа йәбешмәгән ғәйбәттәр таратты. Уның уҫаллыҡтарын бермә-бер арттырып һөйләп йөрөнө.
Колхоз тураһында йәмһеҙҙе һөйләргә яратҡан ҡайһы бер ғәйбәтселәр был хәбәрҙе ҡуш ҡуллап күтәреп алдылар. Бурыл — ҡыҙыҡһынып һөйләй, рәхәтләнеп тыңлай торған бер әкиәткә әйләнде.
— Бурыл шулай икән...
— Ҡайыш бауҙарҙы ла өҙә икән...
— Аҙау тештәре алтау икән...
— Бер көн шулай әллә нәмә эшләп бурыл ҡойо янына килеп ятҡан икән дә — бисәләр, бурыл тороп киткәнсе, ҡойо янына бара алмай торғандар икән...
Бурыл тураһында таралған шул ғәйбәттәрҙән һуң уның янына яҡын килеүсе булманы. Конюхҡа ат һораша килгән кешеләр ҙә мөмкин тиклем бурылдан ситкә тайырға тырышалар.
— Теләһә ниндәй ат бир, бурылды бирә күрмә!..
— Бурылдан тибелеп үлер хәлем юҡ!..
— Бурыл менән йөрөргә минең башым ике түгел!..
Уны ҡарамай ҙа башланылар. Ул иртүк сығып китә лә көндәр буйы таллыҡтар араһында йөрөй. Ялына, ҡойроғона, маңлай сәстәренә дегәнәк һырышып бөттө. Ҡойроғо шул дегәнәктәрҙән йыуан бер тумрау — утын ағасына оҡшап ҡалды. Әллә ҡайҙа тәгәрмәскә барып ышҡынғанмы, ҡорһағына дегет буялған. Жнейкаға еккәндә, унан ҡотолор өсөн тип, Әпнасир малайы һаламы сығып торған мөйәтле ҡамыт кейҙергән. Ул уның муйынын игәп, сейләндереп бөтөргән. Былар бөтәһе лә бурылға һөйкөмһөҙ ҡараштан тыуған бер хәлдәр. Ләкин бурыл уға бошонмай, йөрөй бирә. Ул, киреһенсә, таҙарып, һимереп китте.
Әхмәтдиндең быға эсе боша. Ул ҡайһы ваҡыттарҙа эске бер әрнеү менән ғәрләнә.

Йыйылыш байтаҡҡа һуҙылды. Бөтә һөйләүселәр:
— Беҙҙә ат ҡарау насар, беҙ әле атты тәрбиәләй белмәйбеҙ,— тип һөйләнеләр.
Мортаза һүҙ алды. Ул күп ваҡытта ат тураһында булғанда һөйләмәй ҡалмай, сөнки Ҡыҙыл Армияла кавалерист булып хеҙмәт итте. Үҙ атын яҡшы итеп ҡараны, аттары етеҙ ҙә, көр ҙә, таҙа ла булдылар. Шуға күрә бүләк тә бирҙеләр. «Ат тиһәң, үлә ул». Шуға күрә уны ҡайһы берәүҙәр:
— Ат ене ҡағылған,— тип йөрөтәләр. Күп кеше ул һүҙ алыу менән:
«Был ат тураһында һөйләй икән»,— тинеләр. Яңылышманылар.
— Иптәштәр! Һеҙ бурылды юҡҡа обижать итәһегеҙ. Бурыл, минең ҡарауымса, насар ат түгел. Ул бына тигән йөк аты. Һеҙ уның күкрәктәренә ҡарағыҙ, ниндәй киң улар. Аяҡтарын ҡарағыҙ. Дөрөҫ, егәрле ат түгел ул. Уны юртаҡ тип әйтергә теләмәйем. Ну инде теге усал тигән һүҙегеҙ, просто, бер көлкө генә. Ниңә усал булһын, ти, ул бүреме, айыумы, атты түгел, айыуҙы өйрәтәләр. Дөрөҫ, ул Ғәләмшә әбейҙәрҙе әҙәмгә һанамаған, иркәләнгән. Беҙҙең конюх насар, ебегән. Ул бит ат янына барырға, уның ялына ҡағылырға ла ҡурҡа. Әгәр ҙә мин бурыл булһам, был конюхты өйөнән урамға ла сығармаҫ инем.
Ул шул һүҙҙәрҙе әйткәндә, конюхҡа бурыл ошо минутта тышта тәҙрәнән тыңлап торор кеүек тойолоп китте. Мортаза һүҙендә дауам итте.
— Әлбиттә, конюхлыҡ — ҙур эш. Беҙ уға насар ҡарайбыҙ. Беҙҙең лагерҙа бер ветеринар бар ине: «Насар ат юҡ, насар ат ҡараусы бар»,— ти торғайны.
Ошо йыйылышта Мортазаны конюх итеп ҡуйырға булдылар. Был ваҡытта беҙҙең бурыл тик бер үҙе Кәпәреш тауы битендә гулять итеп йөрөй ине.

Бурыл Әлмәш йылғаһына эсергә төштө. Ул аҡрын ғына һыуға һуҙылды. Бер аҙ эскәс, үҙ артынан килгән бер кеше күләгәһен күрҙе. Эсеп тә туйманы, әйләнде лә, ҡолаҡтарын шымайтып, килеүсегә табан ынтылды. Килеүсенең ҡулында йүгән, ә йүгән — бурылдың иң яратмаған нәмәһе. Бурыл уны тешләйем тип ауыҙын асҡанда, уның тештәре араһына ауыҙлыҡ инеп ҡыҫылды. Сапсырға уйланы, ләкин ул арала теге кеше уның елкәһенә менеп ултырҙы.
— Бына һиңә!
Сығынларға ла, үргә һикереп, артҡа шыуҙырып төшөрөргә лә теләне. Ләкин еҙ дағалы күн итек уға ныҡ ҡына бәрелде. Етмәһә, янбаш өҫтөнән тал сыбыҡ шый итеп һыҙғырып та ебәрҙе.
«Был теге конюх түгел икән шул,— тип уйланы бурыл,— шаярмаҫ, ахыры...»
Мортаза бурылды алып ҡайтыу менән бағанаға бәйләп ҡуйҙы ла, аҡрын ғына йүпәләй-йүпәләй, муйындарынан башлап ҡойроғона тиклем һыйпап сыҡты. Уның ялдары, ҡойроҡтарындағы дегәнәктәре бөтөнләй таҙартылды. Бурылдың тәне мунса ингән кеүек еңеләйеп китте...
Мортаза бурылды үҙ ҡарамағына алды. Конюх эше буйынса кәрәк-яраҡтарҙың бөтәһенә лә бурылды тотондо, уны екте. Бер көн йәкшәмбе баҙарына ла уны егеп сыҡтылар. Ултырып барыусылар бөтөнләй аптырап ҡалды.
— Бурылмы был әллә түгелме, ҡайһылай йүнәлеп киткән бит был! — тинеләр. Бурылдың холҡонда, йөрөш-торошонда тулы үҙгәреш тыуҙы. Ул хәҙер үҙенән-үҙе риза. Тәүҙә гел генә асыуланып тора торғайны. Шуның арҡаһында уның нервылары боҙолоп, усалланып киткәйне. Хәҙер Мортаза килеп муйынын һыйпап китә. Үтеп барғанда-маҙарҙа, иркәләгән кеүек итеп, янбашына ла усы менән һуғып ҡуя.
Бына басыу эшенең һуңы етә, ашлыҡ ташылып, һуғылып бөттө, элеваторҙарға ташыу башланды, күп аттар транспорт эшенә егелде, туңға һөрөү ваҡыты килеп етте. Ашығыс эшләү, эштәрҙе тиҙерәк бөтөрөү кәрәк ине. Бригадир Әхмәтҡол бөгөн зыҡ ҡупты.
— Ат етмәй, күрше колхоздарҙан ат һорарға кәрәк, юҡһа өлгәрә алмайбыҙ.
Мортаза әле генә мискәле арбаны тартып ҡайтҡан бурылды күрһәтте.
— Бына, бурылды егегеҙ. Ул айыу менән бер, самай һабан аты.

Әхмәтҡолдоң ҡолаҡтары тора ҡуйҙы.
— Уны, ат түгел, айыу, тип һөйләйҙәр бит, бөтәһе лә шунан ҡаса.
— Айыу! — тип мыҫҡыл менән көлдө Мортаза.— Эйе, көс яғынан айыу.
— Уҫаллығы яғынан?
Мортаза рәхәтләнеп көлдө.
— Тапҡандар һүҙ, әйтер инем үҙегеҙгә, ат булғас, ат инде. Эй бахырҙар, ашап ҡуймаһын үҙегеҙҙе!
Башҡа колхозсылар ҙа килеп еткәйнеләр. Уларҙың һәр береһе шул ат тураһында кәм тигәндә берәр әңгәмә һөйләгән кешеләр, үҙҙәренән-үҙҙәре оялып киттеләр. Эстән генә үҙҙәренән-үҙҙәре көлгөләре килде. Әхмәтҡол тауышын бөтөнләй үҙгәртте:
— Ысынлап та,— тине,— Фазыл ҡашҡаһы менән икәүһен егергә лә бөгөндән үк Ғәләмшә Әхмәтдине менән Сабир Сәфәрен Олотәкә төбәгенә ебәрергә кәрәк. Бынау мискә кеүек атты файҙаланмай ятыу үҙе бер оят табаһа!
Ошо һүҙҙәрҙе әйткәндә, бурыл ҡойроғон болғап ҡуйҙы. Ул, билдәле, үҙе тураһында һүҙ барғанын аңламай, төшөнмәй, ләкин кешеләрҙең гел уға ҡарап, ҡайһыларының бармаҡ менән төртөп һөйләүҙәренә аптыраған кеүек ҡарай.
Ул тик Фазыл ҡашҡаһы менән һабанға егелеп ун бураҙна сыҡҡас ҡына, Мортазаның йылмайып килгәнен күрҙе лә: «Кисә былар ошо турала һөйләшкән булһалар кәрәк»,— тип уйлағандай булды. Әгәр ҙә шулай уйла
ған булһа, ул яңылышмаған.